*Луиза ФАРХШАТОВА*

# Динә ҡорған аҡ сатыр

Динә Талхина ҡалдырған донъя аҡ сатыр кеүек киң һәм яҡты. Һәр саты изгелектән туҡылған, һәр киргеһе кемгәлер таяу йәки терәк булған. Шул сатыр эсенә кемдәр генә инеп йылынманы, ышыҡ тапманы!.. Тәү күргәндәге көлтәләй ҡылған сәсле, зәңгәр күҙле шаталаҡ һәм алсаҡ ҡыҙ ҙа шунда олпатланды, мәргән һүҙле сая шағирәгә әүерелде. Әсәй булды, өләсәй бәхетен татып китте. Һәр кемебеҙгә иғтибарлы булды Динә. Һүҙгә саҡ ҡына әүәҫлеге булған йәштәрҙе сатырына йыйып, ҡулдарына ҡаурый һалды, ҡанат ҡуйҙы, өмөт уятты. Йәштәр генәме ни, оло-олпаттар ҙа, төңөлгәндәр ҙә сатыр эсенә инде, ҡуҙ терелтеп, йән аҙығы алып сыҡты. Динәне мин шул сатырҙы ҡора башлағанынан беләм. Беҙ бер синыфта, бер вузда уҡыныҡ, бер өлкәлә эшләнек. 1968 йылдың сентябрь башында беҙҙең 9-сы ”е” синыфын, ентекләп танышып та өлгөрмәгән балаларҙы, әҙәбиәт уҡытыусыһы Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова Баязит Бикбайҙы ерләргә алып барҙы. Опера һәм балет театры бинаһынан мосолман зыяратына ҡәҙәр беҙ Динә менән венок тотоп барҙыҡ. Ул саҡта Баязит Бикбайҙың шиғырҙарын, поэмаларын сәхнәнән һөйләмәгән йәки уҡымаған уҡыусы булмағандыр, моғайын. Ҡәбер янында һуңғы һүҙҙәрҙе тыңлап, тәүге тапҡыр тере шағирҙарҙы ишетеп, уларҙың да илағанын күреп, күҙҙәребеҙ шәмәрешеп ҡайтҡайныҡ. Шунан башлап беҙ йыш ҡына белгән шиғырҙарыбыҙҙы һөйләп, кисәләрҙә ҡатнашыр булып киттек. Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Динәгә әҙәби түңәрәк ойоштороуҙы ла йөкмәтте. Ул күңел торошо, фиғеле менән беҙҙән айырылып тора ине шул. Йөрөгәндә лә ерҙән йөрөмәй, оса-елә әллә ҡайҙа ашығып, өлгөрөп ҡалайым тигән кеүек, һәр эшенән йәм табып, ләззәт алып йәшәне, эшләне. Синыф ишектәрен шар асып килеп инер ҙә, яңғыратып сәләмләр, ҡулындағы портфелен һелтәй-һелтәй иң артҡы партаға барып ултырыр ине. Интернатта уҡыуға иғтибар былай ҙа көслө, дәрестә, тағы әҙерлек ваҡытында ғилемде етәрлек бирәләр. Әммә Динә беҙ киске йоҡоға талғас та йыуыныу бүлмәһенә сығып, тағы-тағы уҡый. Көлөп ҡарағандарыбыҙ ҙа булды, ә ул киске һиллектә үҙ донъяһы-

*Динә Талхина*



на сума, хыялдар илендә гиҙә, шиғырҙар яҙа, үлеп ғашиҡ булған егетенә хаттар теҙә. Ҡасан йоҡлай торғандыр. Ә иртән иртүк тыштан битт әре алланып инә. Интернатты биш ураған, иң кәрәкле генә күнекмәләрҙе эшләгән. Хатта ял көндәре лә шулай башлана. Күнекмәләрҙең дә ни еттеһен һайламаҫ, билде нескәртә, аяҡты һәм кәүҙәне турайта торғанын табыр. Һәр кис һайын өс ҡатлы ятаҡтың баҫҡыстарын йөҙ тапҡыр менеп төшә. Беҙҙе лә үҙе менән эйәртә. Шауламаҫҡа тырышабыҙ, сөнки өлкән синыф малайҙары беҙҙән "капитан ҡыҙҙары маршка сыҡты", тип көлә. Беҙҙең тәрбиәсебеҙ отставкалағы капитан Рәйес Биктимер улы була торғайны. Шуға айырым исемгә лайыҡ булдыҡ. Был күнекмәләр ҙә мөрхәтһендермәне Динәне. Былай ҙа өҙөлөргә торған билдәренә үҙ ҡулдары менән корсет тегеп кейеп ебәргәс, беҙ тағы "аh" иттек. Ҡәҙимге мәктәп кейемен дә көн дә байрамса бөхтәләр булды. Селтәрле-семәрле яғалар, ең остары айырым зауыҡ менән һайланыр, бер кемдекенә лә оҡшамаҫ, эҙләһәң дә тапмаҫһың. Сәстәрен ике яҡҡа бүлеп үреп, ҡапма-ҡаршы сылбырлап кәрән таҫма менән беркетер. Уҡытыусылар менән ғәҙеллек хаҡына бәхәскә лә инергә, әйткән һүҙендә торорға ла көсө етте. Шул холҡон олоғайғас та ташламаны. Синыфта ул комсорг та, староста ла түгел, әммә лидер.

Синыфта әҙәбиәтте лә, математиканы ла берҙәй яҡшы белгән уҡыусылар күп ине. Синыф етәксеһе Нәсимә Вилдан ҡыҙы математика уҡытыусыһы булһа ла, беҙҙе гуманитар фәндәр буйынса махсуслаштырҙы. Әҙәбиәт фәндәрен исемдәре танылулы уҡытыусылар Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова, Разия Хәмит ҡыҙы Ниғмәтуллина уҡытты. Үҙем тамамлаған Яңы Байрамғол һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең әҙәбиәт уҡытыусыһы Зәкиә Закир ҡыҙы Йәшелбаева әҙәбиәткә айырым бер мөнәсәбәт булдырғайны. Ул бары Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Ҡадир Даян шиғырҙарын сәхнәнән уҡыуға ҡоролғайны.

Был мәктәптә ҡулыма ҡәләм тотторop, ижадҡа өндәнеләр. Әҙәби түңәрәк етәксеһе Динә Хафизова мине лә күндерҙе. Хатта мәктәптең әҙәби альманахында ла шиғырҙарымды баҫтырырға батырсылыҡ иттем. Кешелә әллә ҡайһылайтып ышаныс тыуҙыра белде ул. Бәлки ошо уҡ мәктәптә уҡыған бер туған һеңле-ҡустыларын ҡурсалауын күреп йөрөгәнгә, әллә үҙе бауырға үтә белде. Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Мәтәл ауылынан килгән Хафизовтар Маяҡ—40 фажиғәһен үҙ елкәһендә татыған ғаилә булыуын беҙ һуңлап ҡына аңғарҙыҡ. Теләһә ниндәй ауырлыҡ кисерһә лә бошонмай, төңөлмәй торған тоҡомдар була шул ул. Сер сисһәң, серең ятыр, ҡайғы килһә, ҡайғы ҡайтарышыр тоғро дуҫ кешегә һәр даим кәрәк. Тик ундайҙар бик һирәк. Үҙе сибәр, үҙе ҡыйыу Динәне синыфыбыҙҙағы барлыҡ малайҙар ҙа хөрмәт итте. Бигерәк тә Рауил менән Факил, Марс менән Абдулкәрим, Альберт йоҡоларын юғалтып уфтанып йөрөнө. Ә уның теленән Бәҙретдин исеме төшмәне. Тәүге шиғырҙарына һалынды, хаттарға ятты.

Әй ул бала саҡтың ыуыҙ хәсрәттәре! Ҡайһы хәтфәләрҙә генә аҙашып ҡалдылар икән! Аҙаштылармы, әллә аймылыштылармы? Юлдарыбыҙ аймылышып алһа ла, беҙ дуҫлығыбыҙҙы ғүмергә һаҡлап ҡалдыҡ. Университеттан һуң икебеҙ ҙә матбуғатта хеҙмәт иттек. Осрашһаҡ, һөйләшеп һүҙ бөтмәҫ, күңел ҡанмаҫ ине. Учалыла түл йыйып, шиғ-

риәткә етди ҡараш менән килде Динә Өфөгә. Нәшриәттең балалар әҙәбиәте бүлегенә килеү менән авторҙар коллективы йыя башланы. Ул саҡтағы нәшриәт директоры башҡорт балалар әҙәбиәтен инҡар итеп, юҡҡа сығарып торғанда, Динә кеүек сәмләнеп тотонғанда ғына юл ярып була. Балалар өсөн яҙыу үтә лә ауыр, үтә лә яуаплы, етмәһә бик бәләкәй гонорарлы булыуын белеп, олпат яҙыусыларҙы, уларҙың балаларын, фән эшмәкәрҙәрен, журналистарҙы, юғары уҡыу йорттары студенттарын саҡыра башланы. Мине лә өгөтләргә тотондо, һирәк-һаяҡ баҫылған хикәйәләремде бер папкаға туплап, фамилиямды яҙып һалып ҡуйҙы. 1989 йылдың 1 июнендә Башҡортостан радиоһында ”Иләү” барлыҡҡа килгәс, тәүге авторҙарҙың береһе башҡорт балалар әҙәбиәтен кинәнеп таратыусы Динә Талхина булды. Студияға килгән һайын ҡосаҡ-ҡосаҡ китап килтерҙе. 1992 йылдың 27 февралендә тәүге ”Сәңгелдәк” тапшырыуын, ”Тамыр” балалар студияһына нигеҙ һалыусы балалар байрамын бергә ойошторҙоҡ. Филармония сәхнәһенән китап таратыусы Динә апайҙарын хәҙер әллә кем булып киткән сабыйҙар — Нияз Закиров, Әнисә Аҡкилдина, Айгөл Иҙрисова, Азат Ғәйнетдиновтар яҡшы хәтерләйҙер. Теүәл 15 йыл элек, февраль айының ыжғыр һыуығында сәхнәлә туңған күңелдәрҙе терелтеп, саф башҡортса сабыйҙар тапшырыуына юл асҡайныҡ. Февраль айының нәҡ ошо көнө, уның әсе еле Динәне арабыҙҙан алып китте. Ошо арауыҡта күпме изгелектәр башҡарып өлгөрҙө балалар әҙәбиәте мөхәррире Динә Талхина. Ике-өс төҫтәрҙән генә торған китаптарҙы сағыуҙары алыштырҙы. Башҡорт яҙыусыларының классик өлгөләре ҡайтанан баҫылды, яңылары асылды. Уларҙың һәр береһенә шатланып, радио-телевидениенан һөйөнсөләп эшләне Динә. Шулай ҙа бик аҙ ине оригиналь әҫәрҙәр. Балалар студияһы аҙнаһына ике тиҫтәгә яҡын тапшырыу сығара башлағас, наҡыҫлыҡ үҙен тағы һиҙҙертте. Көн дә яңылыҡ ҡайҙан алмаҡ кәрәк? Беҙ уның менән айырым балалар нәшриәте хаҡында ла уйлаша башланыҡ. ”Йәншишмә” гәзите 2002 йылдың 24 апрель һанында балалар әҙәбиәте хаҡында түңәрәк өҫтәл ойошторҙо. Балалар өсөн күп ижад иткән Абдулхаҡ Игебаев, Сафуан Әлибай, Фаиҡа Туғыҙбаева, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Зөлфиә Ҡарабаева һәм Динә менән беҙ ҡатнаштыҡ. Һүҙ айырым нәшриәт хаҡында ла барҙы. Балалар өсөн сыҡҡан баҫманы вазифалы ағайҙар уҡый тиме ни? Балалар былай ҙа белә аҙ икәнен. Был хәл бөгөн дә актуаль булып ҡала. Йылына ике тиҫтә генә авторҙың рус, башҡорт һәм татарса сыҡҡан, тиражы ике меңдән дә артмаған китаптары балалар ихтыяжын ҡәнәғәтләндермәй. Тел бәҫен күтәреү юҫығында яҡшы ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырғанда балалар өсөн баҫмаларҙың күләмен арттырыу файҙаға ғына булыр ине. Башҡортостандан ситтә йәшәүселәр һанын, балалар баҡсаларының, мәктәптәрҙең дә иҫәбен күҙ уңында тотһаң, тираж һанын бермә-бер арттырыу фарыз. Динә һәр саҡ ошо турала уйланып йәшәне.

Минең дауамлы ”Йәшәмеш” хикәйәләрен дә ныҡышып яҙҙыртты. Телефондан өйгә шылтырата ла: ”Йәшәмеш нимә эшләй?” — тип һорай. Эшләмәй, тип ҡара, тоҙло-боросло һүҙен дә әйтә, көн билдәләй, һалпы яҡҡа һалам да ҡыҫтыра, анекдотын да һөйләп ҡуя. Эскерһеҙ,

ярҙамсыл кешегә баш тартыу ҙа оят. Көндән-көн олпат шағирә, популяр йырҙар авторы була барған ҡәҙерле кешемдең ышанысын аҡларға тырыштым. Тормошта ҡыйын мәлдәрҙә лә ул иңен ҡуя белде, йыуатыр һүҙҙәре гел табылды. Үҙе сире менән йәнтәслим көрәшеп түшәктә ятҡанда ла башҡаларға терәк, һоҡланғыс дуҫ булды. Ул үҙе беҙҙең ярҙамға нығыраҡ мохтаж ине, тик сер бирмәне. Үҙе шулай артыҡ сабыр, кеселекле булмаһа, сиренә оҙаҡ түҙеп йөрөмәһә, бәлки, бөгөн дә йәшәр ине. Аяғын имгәткәс тә ғәйебен үҙенән эҙләне. Берәйһен рәнйетмәнемме, дорфа булманыммы икән, тип өҙгөләнде. Өфөнөң абруйлы клиникаларының береһендә оҙаҡ дауаланып та хәле яҡшырмағас, башҡа табиптарға мөрәжәғәт итеүҙе уңайһыҙ һананы. Ҙур һынауҙар үтеп, дингә ныҡлап ышанып сыҡты Дinә дауахананан. Хоҙайға шөкөр итеп, таяҡ менән эшкә сыҡты. Хәтеремдә: Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙының тыуған көнөнә интернатҡа икәүләп барҙыҡ. Таяҡ менән машинаға көскә менде, әммә сәхнәгә сыҡҡанда шыҡ баҫып, таяҡһыҙ һөйләп төштө. Ҡылдың бер ере өҙөлһә өҙөлә бит ул. Динә яҙғы тайғаҡта тағы аяғын имгәтте. Әммә тағы аяғына баҫырына ышанып, төшөнкөлөктөң осмотон да күрһәтмәне. Киреһенсә, йорттан тороп бар донъя менән бәйләнештә булды, ижад итте. Әллә ниндәй хыялдар ҡорҙо. Һуңғы уйы — үҙе ижад иткән йырҙарҙан сәхнәлә концерт ойоштороу ине. Ә уның һәр көн иртән түшәгенән махсус ҡоролмаларға тотоноп тороуын, шундай ҡоролмалар ашау урынында, яҙышҡан өҫтәлендә тороуын бик аҙҙар белде. Телефондан үсәп ятҡан мәхлүктәр ҙә белһә әй ҡыуанырҙар ине. Динә шундайҙарҙан өҫтөн булды, ваҡланманы. ВТЭК табибы өйөнә килеп, үҙе ишектән оҙатып ҡала алғаны өсөн генә лә икенсе төркөм инвалидлыҡты йәһәт кенә өсөнсөгә алмаштырғас та аптыраманы. Ире Ринат та йыуатты. Тимәк, уларға ла дауалау эффектлылығы планын тултырырға кәрәк, йәки илде сәләмәтерәк күргеләре киләлер. Динә башҡаса була алмай, тәрбиәһе шундай, ауыҙы тулы ҡан булһа ла төкөрмәй торған кеше ине ул. Ә бәләкәй генә йөрәктә тәрән яра ҡалмай буламы? Улар күбәйҙе лә күбәйҙе. Барыһы ла уның кеүек аҡ күңелле изге булһасы. Аҡ сатырҙы аҡ күңелдәр генә ҡора ала. Динә менән бер бүлектә оҙаҡ эшләгән Әлфиә әйтмешләй, уның тураһында бер генә алама йәки насар һүҙ иҫкә төшмәй. Нәшриәттә баҫылып сыҡҡан һәр китап артында ниндәй көсөргәнешле, махсус белем талап иткән эш ятҡанын уҡыусы белмәй, уға кәрәкмәй ҙә ул. Мөхәррир кемгә тәғәйенләп, кем өсөн тырышҡанын белеп халыҡҡа хеҙмәт итә. Китап баһаһын халыҡ билдәләй. Аҡҡа аҡ, ҡараға ҡара яғыла. Кешеләргә изгелек эшләп, дөрөҫлөк эҙләп йәшәгән Динә тураһында хәтирәләр ҙә тик аҡтан, тик изгенән тирелә. Динә ҡорған аҡ сатырҙа бары аҡ ниәттәр, аҡ теләктәр йәшәй. Һуңғы күреүемдә Менделеев урамындағы баҙарҙа Ринат, ҡыҙы Линда менән өсәүләшеп һауыт-һаба һатып алып ҡыуанышып йөрөйҙәр ине. Динә шатланып ҡыҙының кейәүгә сығыуын һөйөнсөләне. Ул моңһоу ғына йылмайып хушлашты. Һуңғы йортона туң тупраҡты үҙ ҡулдарым менән һалһам да, Динә минең күҙ алдында ана шундай йылмайған килеш хәтерҙә ҡалды.